

*Лира ЯҠШЫБАЕВА,*
*Сибай ҡалаһының*
*13-сө башҡорт мәктәбе уҡытыусыһы*

# Милли рухтың сая һаҡсыһы

Икенсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын үткәреүгә әҙерлек барған көндәрҙә ике ҡоролтай араһында башҡарылған барлыҡ эштәргә байҡау яһау, ҡоролтай ҡуйған бурыстарҙың үтәлешен тикшереү, яңы маҡсаттар билдәләү теләге уяна. Халҡыбыҙ яҙмышы өсөн янып-көйөп, алһыҙ-ялһыҙ тырышып эшләп йөрөгән милли рухлы зыялыларыбыҙ, шәхестәребеҙҙең фиҙакәр хеҙмәтен дә күреп баһалағы, эшендәге уңыштары хаҡында әйтеп үтке килә.

Яңы ҡоролтай алдынан Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты булып, шул саранан рухи көс алған, ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыр өсөн күп көс һалған, милли рухтың сая һаҡсыһы Рафиҡова Нурия Һаҙый ҡыҙы хаҡында ла әйтеп үтеү, эшләгән эштәренә баһа биреү кәрәк.

Милләтенә, туған халҡына күңел түрендә тәрән ихтирам йөрөткән, оҫта ойоштороусы был ханым бөгөнгө көндә Сибай ҡалаһының 13-сө һанлы дөйөм белем биреү башҡорт мәктәбе директоры вазифаһын башҡара. Маҡсаты изге: башҡорт балалары уҡыған мәктәп эшен фәнни нигеҙгә ҡороп, республика күләмендә алдынғылар рәтенә сығарыу; төплө белем биреүгә ҡулайлы шарттар тыуҙырып, һәр баланың һәләтен үҫтереү, тормошҡа, һөнәр алыуға юл күрһәтеү; халыҡ педагогикаһына таянып, тәрбиәгә иғтибарҙы көсәйтеү, балаларҙы әҙәпле, иманлы, илһөйәр, эшһөйәр итеп үҫтереү.

13-сө мәктәпкә килеп директор булғансы Нурия Һаҙый ҡыҙы оҙайлы, данлы хеҙмәт юлы үткән. Уның милләтте күтәреүгә арналған эштәре, әйтерһең дә, ҡаланың ошо башҡорт мәктәбендә эшләүгә әҙерлек осоро булған.

Үҙе Өфө районы Красный Яр ҡасабаһында йәшәгән һәм эшләгән саҡтары тураһында хәтерләп, былай ти:

— Бер саҡ ҡасабаға Мәғәфүр Хисмәтуллин, Мөхәммәт Иҙрисовтар концерт ҡуйырға килгәйне. Ниндәй күренекле артистар! Ә залда кеше юҡ! Исмаһам, башҡорт, татары килмәгәс, башҡа милләттәргә ни үпкә. Ҡыйын булып китте. Шул саҡ үҙ-үҙемә һүҙ бирҙем: халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәрен белдереү өсөн бөтә көсөмдө һаласаҡмын.

Нурия Һаҙый ҡыҙы Красный Ярҙа китапхана мөдире булып эшләгән дәүерҙә унда республика гәзит-журнал мөхәррирҙәре, яҙыусылар, шағирҙар, артистар йыш була. Үткәреләсәк сараның уңышы эштең ойошторолоуынан тора. Шуға күрә бераү ҙә, урыҫмын, сыуашмын тип тормай, кисәләргә, осрашыуҙарға ихлас йөрөй башлай.

Ниндәй генә йола байрамдары үткәрелмәй: балаға исем ҡушыу,



05.2002 Part 1.p65 98 06.06.02, 17:17



*Нурия Рафикова (һулдан дүртенсе) башкорт теле укытыусылары менән*

бәпәй туйы, ҡаҙ өмәһе, ғаилә байрамдары, һабантуйҙар, тәүге бураҙна, урам байрамдары. Сценарийҙарҙы Нурия Һаҙый ҡыҙы үҙе төҙөй, үҙе яҙа.

Айырыуса ҡурай байрамы халыҡтың хәтерендә ныҡ уйылып ҡала. Күренекле ҡурайсылар саҡырыла. Башҡорт ҡурайының үҙенсәлекле музыка ҡоралы икәнен күп милләтле Красный Яр халҡы шунда танып белә һәм уны мәңгелеккә ярата.

— Иҫ киткес фәһемле сара булды, бындай ҡурай байрамын күргәнем юҡ ине, — тип кисәгә баһа бирә Мәҙәниәт министрлығынан килгән вәкил Әлфиә Ғәни ҡыҙы Садиҡова.

Еңеү көнөн йыл һайын үҙенсәлекле, иҫтә ҡалырлыҡ итеп үткәреүгә лә өлгәшәләр бында. Әсә йылы республикала тәүгеләрҙән булып Красный Ярҙа үткәрелә. Хатта Мәскәүҙән «Ғаилә фонды»нан ҡунаҡтар ҡатнаша, үткәрелгән сараның тәрбиәүи әһәмиәтен юғары баһалайҙар.

Ниһайәт, Красный Ярҙа яңы мәҙәниәт йорто асыла. Тағы дәртләнеберәк эшкә тотоналар. Өрйәңынан костюмдар тектерелә, тәрбиәүи сараларҙы тағы йәнлерәк итеү мөмкинселеге тыуа.

Депутат итеп һайланған Нурия яңы мәҙәниәт йортонда башҡорт телендә башҡорт йолалары менән никах тантанаһын үткәреүҙе башлап ебәрә. Бындай никахлашыу халыҡҡа оҡшай, был идеяны күтәреп алалар һәм ул башҡа ЗАГС-тар тарафынан хуплау таба.

Красный Яр халҡы Өфөлә үткән спектаклдәрҙе, һәр төрлө премьера, бенефис, юбилей кисәләрен — береһен дә ҡалдырмай. Ҡасаба етәкселәре автобусын да бирә, аҡсаһын да бүлә, бер ярҙамдан да баш тартмай.

Нурия Һаҙый ҡыҙы әйткән һүҙендә тора: Красный Ярҙа йәшәүселәр республиканың артистарын, яҙыусыларын, арҙаҡлы шәхестәрен, йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен белеп кенә ҡалмай, ярата, үҙ күрә.

Урыҫы ла, сыуашы ла, татары ла, башҡорто ла бер тауыштан:

— Әлдә Нурыябыҙ бар! — тип ҡыуана. — Эшләтә лә, тыңлата ла, ойоштора ла белә.

Дүрт бала әсәһе Нурия ханым бөтә эштәрҙең уртаһында янып йәшәй, барыһына өлгөрә. Шулай ҙа, өлкәнәйә башлағас, тыуып-үҫкән ер, ата-әсә төйәге уны үҙенә тарта. Сибайын һағыныу хисе көндән-көн арта. Һәм ҡайтырға тигән ҡарар ҡабул итә. Аҙаҡтан Нурия Красный Ярҙан: «Ауылдың йәмен алып киттең. Һине һағынабыҙ», тигән хаттар ала.

Рафиҡова үҙенең әүҙем хеҙмәте, көслө рухы, бөтмәҫ-төкәнмәҫ дәрте менән күп милләтле төбәктә йәшәп, эшләп, ҡоролтай ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуға, йәмәғәтселек фекерен халҡыбыҙға еткереүгә булышлыҡ итте, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарарҙарын бөтә халыҡтың да



05.2002 Part 1.p65 99 06.06.02, 17:17

мәнфәғәтен сағылдырыуын, уларҙың социаль-иҡтисади һәм рухи ихтыяждарына тап килеүен аңлатты, халыҡтарҙы берҙәм дөйөм эш менән бергә тупланы, ойоштторҙо.

1999 йылда Рафиҡовтар ғаиләһе Сибайға күсеп килгәс, Нурияны Үсмерҙәр клубы берләшмәһенең директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Бында ла үҙенә хас энергия, дәрт менән эшкә тотона, емерек клубтарҙы рәткә килтерә, кәрәкле спорт инвентаре менән тәьмин итә, клубтарҙың эшен терелтә, йәнләндереп ебәрә. Эштең һөҙөмтәһе шунда уҡ күренә — Батыр Йәндәүләтов, Серик Усманов Лос-Анджелес ҡалаһында ниндзя буйынса ярышта Бөтә донъя чемпионы тигән исем яулауға өлгәшә.

Әммә Нурия Һаҙый ҡыҙына бында оҙаҡ эшләргә бирмәйҙәр. 1999 йылдың 31 авгусында ҡала халыҡ мәғарифы идаралығы, ҡала хакимиәте менән берлектә кәңәшләшеп, 13-сө мәктәпкә директор итеп тәғәйенләйҙәр. Һәр вазифаға яуаплы ҡарап өйрәнгән Рафиҡова ең һыҙғанып эшкә тотона.

— Ниһайәт үҙ ерлегем, үҙ милләтем араһында эшләү бәхете насип булды, — ти ул. Иң тәүҙә ҡала аҡһаҡалдарын, ҡоролтай ағзаларын йыйып һөйләшә, эште уларҙан фатиха алыуҙан башлай.

Ҡоролтай ағзалары уға: «Ҡалабыҙҙағы берҙән-бер башҡорт мәктәбен күтәрергә кәрәк. Ул суверенитет емеше», — тиҙәр, уға ышаныс белдерәләр.

Нурия Һаҙый ҡыҙының бөгөнгө эшмәкәрлеген Салауат Әбүзәрҙең шиғыр юлдары аша күрһәтер инем.

Ғәзиз ерем — һутлы кәрәҙ,
Һыйыға бай — йомарт та.
Халҡым гүйә егәрле күс,
Ә Ватаным — умарта.

Мәктәп менән бәйләнешле һәр береһе, уҡыусылар, уҡытыусылар, ата-әсәләр һәм түңәрәктәр алып барыусылар менән дә оҫта етәкселек итә ул. Иртәнсәктән ҡара кискә тиклем эргәһенән кеше өҙөлмәй.

— Нурия Һаҙыевна, мин бер тәҡдим менән ингәйнем...

— Уҡыусым олимпиадала 1-се урын алды.

— Осрашыу үткәрәйем тигәйнем.

— Көрәш буйынса ярыш беҙҙең мәктәптә буласаҡ...

Эшендәге уңыштары, ҡыуаныс-шатлыҡтары, ҡайғы-зарҙары, тәҡдимдәре, үтенестәре һәм борсоған һәр төрлө мәсьәләләр менән директорға киләләр. Ә етәксе һәр береһенә дөрөҫ яуап биреүгә өлгәшә, маҡтап та ебәрә, ҡайһыһын йыуата, икенселәренә юл күрһәтә, тик бер ваҡытта ла битараф ҡалмай. Күңел йылыһын кешеләргә күберәк таратҡан һайын, гүйә, үҙ күңеле ныҒыраҡ байый, рухы саялана, нығына.

Етәксе ялы, ваҡыты менән иҫәпләшмәй, эш өсөн яна. Мәҫәлән, йәйге айҙарҙа, башҡалар рәхәтләнеп ял иткәндә, ул мәктәбен бер көнгә ҡарауһыҙ ҡалдырмай эшләй. Яңы уҡыу йылына әҙерлек баһаланмай ҡалманы, мәктәп 2-се урынға лайыҡ булды, шулай уҡ уҡытыу эше лә ыңғай яҡтан телгә алынды һәм ҡала хакимиәтенең Почет грамотаһы менән билдәләнде.

Маҡтап телгә алмаҫлыҡ та түгел! Һуңғы ике йылдағы уңыштар үҙҙәре үк башҡорт мәктәбенең кимәле тураһында әйтеп тора. Ҡала кимәлендә үткән предмет буйынса олимпиадаларҙа мәктәп бөтә фәндәр буйынса призлы урындар яулай. Хатта башҡорт мәктәбенә түбәнһетеп ҡараусы ҡайһы бер милли рухһыҙ әҙәмдәр үҙҙәре үк был хәлгә шаҡ ҡата.

Уңыштар үҙҙәре һөйләй: башҡорт теле буйынса инша яҙыу, тасуири шиғыр һөйләү, әҙәби ижад бәйгеһендә мәктәп алдынғы урындарҙы һис бирмәй. Математика, физика буйынса призлы урындар яуланды, география, биология буйынса ла йылдан-йыл мәктәп беренселекте бирмәй. Технология фәне лә бында өлгөлө ҡуйылған.

Республика буйынса үткәрелгән сараларҙа ла мәктәп йылдың-йылы әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, Йәнбирҙина Гүзәл Сабирйән ҡыҙы башҡорт теле буйынса «Йыл уҡытыусыһы — 2001» республика бәйгеһендә ҡатнашып, 2-се урын яуланы. Бөрйән районында үткәрелгән «Урал батыр» эпосы буйынса республика конкурсында ҡатнашып, 13-сө мәктәп уҡыусы-



05.2002 Part 1.p65 100 06.06.02, 17:17

лары лауреат булып, диплом һәм Почет грамотаһы алып ҡайтты.

Мәктәптең хор коллективы (етәксеһе Ҡунаҡбаева М.Р.) республиканың «Радуга» («Йәйғор») хор коллективтары ярышында ҡатнашып лауреат исемен яуланы.

«Юнеско» эргәһендә ойошторолған йәш лидерҙар мәктәбе ярышында ҡатнашҡан Бүләков Илнур 1-се турға үткән һигеҙ еңеүсе араһына инде, 2002 йылғы республика олимпиадаһында тарих фәне буйынса почетлы III урынды яуланы. 11-се синыф уҡыусыһы Гөлфиә Сәлихова башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика ярышында I урынға лайыҡ булды һәм БДУ-ның буласаҡ студенты тип иғлан ителде.

— Башҡорт мәктәбе шулай булырға тейеш, — ти ҡала мәғариф идаралығы методисы А.И. Абдуллина, мәктәпкә ҙур ихтирам һәм ышаныс менән ҡарап. Мәктәп етәкселеге балаларҙы тормошҡа әҙерләү буйынса ентекле пландар ҡора, ошо йүнәлештә етди эш алып бара. Тегеү цехы эшләй башланы. Хәҙер мәктәптең башҡорт милли кейемдәре тегеп һатырлыҡ мөмкинселеге бар. Беҙ теккән кейемдәрҙә Сибай филармонияһы артистары баш ҡала сәхнәләрендә сығыш яһай. Малайҙар өсөн айырым цех асылды — өй кәрәк-яраҡтары әҙерләү, балта эштәренә өйрәтеү күҙ уңында тотола. Башҡорт балаһы эш рәте белһен өсөн ойошторола былар.

Белем усағының абруйы артыуын күреп, уҡытыу кимәле юғары икәнлекте белгәс, ата-әсәләр балаларын милли мәктәпкә алып килергә ашыға. Өс беренсе синыф йыйылыу, параллель кластар һаны артыу шуны раҫлай.

Мәктәп етәкселәре, уҡытыусы, уҡыусылар матбуғатҡа ла иғтибарлы. Гәзит-журнал алдырып уҡыу етди ҡуйылған. Шуға күрә уҡыусыларыбыҙ йылдың-йылы «Йәншишмә» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе исеменә лайыҡ була. Уҡыусылар араһында хәбәрселәр ҡоро бар. Уларҙың мәктәп яңылыҡтары тураһындағы, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған темаларға яҙған мәҡәләләре гәзит биттәрендә йыш күренә.

Республика уҡытыусыларының август конференцияһы Сибайҙа үтәсәк. Беҙ мәктәбебеҙгә Президенттың килерен көтәбеҙ, хәҙерҙән үк бөтә коллектив менән тырышып, уны лайыҡлы ҡаршылау өсөн әҙерлек эше алып барабыҙ...

Нурия Һаҙый ҡыҙы Рафиҡова талапсан, гәҙел, һәр яңылыҡты күтәреп алырға әҙер торған әүҙем етәксе. Тормошта, хеҙмәттә бай тәжрибә туплаған оҫта ойоштороусының халыҡ араһында абруйы арта. Мәктәп коллективын туплау, һәр бер уҡытыусыны эшкә дәртләндереп, канаттар ҡуйыуҙа директор ярҙамсыларының, урынбаҫарҙарының да өлөшө ҙур. Мәктәп уҡытыусылары хәҙер кафедраларға бүленеп эшләү тәжрибәһен өйрәнә.

Уҡытыусылар бер төптән тырыша, шуға ла мәктәбебеҙ йәмле, ҡотло, йәнле, ҡайнап, балҡып тора. Республикала ошондай саф башҡорт мәктәптәре күберәк булһа, балаларыбыҙ насар тәьҫирҙәргә, насар ғәҙәттәргә бирелмәҫ ине.

«Республикала йыл һайын тиҫтәләгән мәктәп асылыуы, йөҙҙәрсә саҡырым юлдар һалыныуы, газ үткәрелеүе — былар барыһы ла шул суверенитет емеше», — тигәйне Башҡортостан Республикаһының Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов үҙаллылыҡтың 10 йыллыҡ юбилейын ҡаршылағанда. Сибай ҡалаһындағы 13-сө башҡорт мәктәбе лә суверенитет ҡаҙанышы ул. «Халыҡ үҙәгенең, Ҡоролтай башҡарма комитетының ныҡышмалы тырышлығы арҡаһында барлыҡҡа килде был мәктәп», — тиҙәр уҡытыусылар С.Өмөтбаева менән Р.Үтәғолов, сикһеҙ ҡыуанып.

Икенсе Ҡоролтай алдынан Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты Нурия Рафиҡоваға тағы ла ҙурыраҡ уңыштар теләйбеҙ. Әйҙә, йәшә, йәшнә, үҙеңә алмашсылар үҫтер, халҡым рухының сая сатҡыһы!